■ Ислам даирәһе

# ИНСАФЛЫК - ИМАНДЫҢ БЕР ӨЛӨШӨ



Ильдар АЛЯУТДИНОВ

Ҡөрьән Кәримдә, хәҙистәрҙә мосолмандар араһындағы рухи бәйләнештең, берҙәмлектең әһәмиәтлегенә айырым баһым яһала. "Әл-Худжурат (Бүлмәләр)" сүрәһенең 10-сы аятында: "Иман килтергән кешеләр, ысынлап та, туғандар, ике туғанығыҙҙы ла килештерегеҙ һәм Аллаһтан ҡурҡығыҙ, - бәлки һеҙ ғәфү ителерһегеҙ", - тип әйтелгән. Мөхәммәт пәйғәмбәр ҙә: "Иман килтергән кеше икенсе диндар өсөн бер бина кеүек: бер өлөшө икенсеһен тотоп тора", - тигән.

Хәҙерге ваҡытта мосолмандар бик күп. Ләкин иман нигеҙенән йыраҡ булыуҙары һәм улар араһындағы рухи бәйләнештең зәғиф булыуы арҡаһында был өммәт донъяла тотҡан тейешле урынын һәм тәғәйенләнешен юғалтты. Бер кеше Ислам хаҡында китап уҡығандан һуң: "Был ҡалай камил дин. Эх, уның әйәреүселәре лә ысын, хаҡ булһа ине", - тип әйтеп ҡуйған. Икенсе төрлө әйткәндә, кешелектең дини үсешенең был һуңғы осоро потенциалы тик көслө, бирешмәҫ, түҙемле кешеләр аша ғына тормошҡа ашасаҡ, ә улдайҙарҙың һаны әлегә бик әҙ.

Донъяла мосолмандар һаны бер миллиардтан ашҡан да инде, тик уларҙың күбеһе "мосолман" булып һанала ғына. Фәжәйеп, ләкин мосолмандар үҙҙәре Ислам динен дөрөҫ ҡабул итеүгә "кәртә" булып торалар. Башҡа кешеләрҙең динебеҙгә ҡарата мөнәсәбәте беҙҙең аша формалаша. Миҫал артынан алыҫ йөрөр кәрәкмәй. Статистика буйынса, Мәскәүҙә бер миллиондан ашыу мосолман йәшәй, ҡайһы бер сығанаҡтарҙа - ике миллион тип күрһәтелә. Тик был миллион дингә өндәү, хәҡикәткә саҡыры булып торамы, әллә Исламды ниндәйҙер ҡурҡыныс, күңелгә ятмаған бер нәмә итеп күҙ алдына килтертәме?

Мосолмандар, йәмғиәттең бер өлөшө буларак, матди һәм рухи потенциалға эйә. Беҙҙең ҡулда - һуңғы пәйғәмбәр аша төшөрөлгән Аллаһ мөрәжәғәте. Был китап бер ниндәй ҙә үҙгәрештәргә дусар булмаған һәм булмаясаҡ. Мосолмандар - 14 быуатлыҡ мираҫтың һаҡлаусылары ла.

Үкенесле, әммә күп кенә дин белгестәренең әйтеүенсә, бөгөнгө мосолмандар - вайымһыҙ, үҙҙәренең эштәре менән генә мәшғүл, төркөмдәргә бүленеп бөтөп, бер-береһенән ситләшкән бер масса. Был хәлдән нисек сығырға? Көсөбөҙҙө, әүәлге бөйөклөктө нисек ҡайтарырға? Яуапты Ҡөрьәндә табып була: "Барығыҙ ҙа Аллаһтың ебенә тотоноғоҙ, айырылмағыҙ, һеҙ берберегеҙгә дошман булған саҡтағы Аллаһтың һеҙгә ниғмәтен иҫкә алығыҙ, Ул һеҙҙең күңелдәрегеҙҙе яҡынайтты, һеҙ Аллаһтың ниғмәте менән ҡәрҙәштәр булдығыҙ". Йәғни берҙәм өммәт булып, Раббыбыҙҙың ҡушҡандарын үтәп, үҙебеҙҙе лә, тирәяҡтағыларҙы ла үсешкә этәреү. Берҙәм, дуҫ булһаҡ ҡына, "иң яҡшы өммәт" исемен ҡайтара алырбыҙ. "Берҙәмлек" нимәгә ҡайтып ҡала? Яуап: йомшаҡ холоҡ, кешелек дәрәжәһен һаҡлау; тыйнаҡлыҡ, Аллаһ ризалығы өсөн кешеләрҙе ғәфү итә белеү, үсләшмәү.

Абу Хурайра еткергән хәҙис буйынса, Мөхәммәт пәйғәмбәр (с.ғ.в.): "Кем дә кем Аллаһ хаҡы өсөн генә тыйнаҡлыҡ, инсафлыҡ күрһәтһә, Аллаһ Тәғәлә уның дәрәжәһен күтәрер", - тигән. Хаҡ динле кешеләрҙең әсәһе Ғәйшә лә: "Иң яҡшы ғибәҙәт - инсафлыҡ", - тине.

Тыйнаҡлыҡ менән кәмһетелгәнлек араһындағы сикте нисек танып белергә? Минеңсә, һәр кем быға яуап таба алыр. Әммә был сикте асығыраҡ итеп күҙаллау өсөн бер ниса аят, хәҙистәрҙе килтерергә булдым.

Бер ваҡыт Пәйғәмбәрҙең (с.ғ.в.) көрәштәше, арҡалашы булған ҡатын ауа-түнә китеп барған, хәлһеҙләнеүҙәрен һәм шул уҡ ваҡытта баҫалҡы булыуҙарын күрһәтергә тырышҡан кешеләрҙе күреп: "Был кемдәр ул?" - тип һораған. Уға: "Был кешеләр ғүмерҙәрен ғибәҙәт ҡылыуға бағышлағандар, дәрүиштәрсә көн иткән мосолмандар", - тигән яуап ҡайтарғандар. Ҡатын: "Раббыбыҙ менән ант итәм, Пәйғәмбәребеҙҙең иң яҡын көрәштәше Ғүмәрҙең аҙымы - аныҡ һәм тиҙ, телмәре - тәьсирле һәм аңғырауыклы, үҙе мәргән атыусы, көслө кеше ине, һәм шул уҡ ваҡытта Ғүмәр - көслө иманлы, бар мосолмандарға өлгө булырлыҡ та кеше булды", - тип аңлатҡан.

Тағы ла бер ваҡиға. Бер көн Ғүмәр башын яһалма әйеп, бөкрәйеп доға уҡып ултырған кешене күреп: "Башыңды күтәр! Динебеҙҙе йәнһеҙләндермә! Аллаһтан ҡурҡыу - йөрәктәрҙә, ә башты нык әйеп, бөкрәйеүҙә түгел", - тип иҫкәрткән. Ҡөрьәндә лә: "Һәм кешеләр алдында сырайыңды һытма, һәм ер йөҙөндә маһайып йөрөмә. Ысынлап та, һәр тәкәбберҙе, маҡтансыҡты Аллаһ яратмай", - тип әйтелә (Ҡөрьән, 31:18). Аятта Аллаһы Тәғәлә яратмаған ике төрлө кешеләр тураһында һүҙ алып барыла. "Мухталь" - тәкәбберлеге эштәрендә, ғәмәлдәрендә беленгән, ә "фахур" - эрелеге һүҙҙәрендә ишетелгән кешеләр.

Пәйғәмбәребеҙ (с.ғ.в.) был хаҡта асыҡ итеп әйтеп ҡалдырған: "Кешенең йөрәгендә саң бөртөгө самаһында булһа ла тәкәбберлек булһа, ул оҗмахҡа инмәйәсәк". Уны тыңлап ултырыусыларҙың береһе бындай һорау бирә: "Әгәр ҙә береү тышҡы ҡиәфәте матур, башҡаларға оҡшаһын тип тырышһа, был да тәкәбберлек буламы?" Пәйғәмбәрҙең (с.ғ.в.) яуабы: "Аллаһ - матур, камил һәм матурлыҡты ярата. Тәкәбберлек - ул эре булыу, хәҡикәт алдында маһайыусанлыҡ, кешеләргә кәмһетеп, түбәнһетеп ҡарау".

Ҡайһы бер осраҡтарҙа кешеләрҙе тик ябай итеп аралаша белмәү, баҫалҡылыҡ булмауы, тәкәбберлек айыра. Шул айҡанлы өммәтебеҙ яфа сигә. Быға юл ҡуйырға ярамай. Шул уҡ ваҡытта, имандың ныҡлыны, инсафлыҡ - бәҫеһеҙ кейем, байғошлоҡ аша түгел, ә йөрәктә Аллаһтан ҡурҡыу булыуы, яҡшы холоҡ аша күренә.

Раббыбыҙ! Һәр беребеҙгә баҫалҡы булырға насип ит, йөрәктәребеҙгә Һинең бөйөклөгөң алдында түбәнлегебеҙҙе, меҫкелегебеҙҙе аңларға ярҙам бир!



# Акыллы фикерләр башны эшләткәннән килә

Төрлечә ял итәргә мөмкин. Кайбер галимнәр карашынча, иң яхшы ял - уйга чуму, фикерләү. Мәгълүм булганча, фикер йөрткәндә, кеше, хыял дөньясына чумып, үткәннәрен күз алдына китерә, киләчәккә планнар кора, нинди дә булса ачыш ясый ала. Тирән уйга чумган башка бик кызыклы фикерләр килә. Моның шактый гына мисаллары да бар.

Бер кеше Имам Әгъзам (Әбү Хәнифә) хәзрәтләренә мондый үтенеч белән килгән.

- Өемдә яшереп куйган янчыгымны таба алмыйм, инде нишлим икән?

Имам Әгъзам бу сорауның дингә бернинди мөнәсәбәте булмавын, бу мәсьәлә белән аңа килеп йөрүнең мәгънәсезлеген әйтә. Ләкин, уйлана торгач, башына бер фикер килә. Һәм мондый киңәш бирә:

- Бар, өеңә кайт та төн буе намаз укы. Бәлки, намаз укыганда, янчыкны кая куюыңны исеңә төшерерсең.

Теге бәндә бу сүзгә ышанмаса да, сынап карарга була. Таң атканчыга кадәр гыйбадәт кылырга ниятли. Ярты төн җиткәч, кылт итеп янчыгын яшергән урын исенә төшә моның. Аны сандык артыннан табып ала. Шуннан соң намаз укып тормый, ята да йоклый. Иртән беренче эше итеп Имам Әгъзам хәзрәтләре янына бара.

- Янчыкны табу өчен төн буе намаз укырга кирәклеге кайсы китапта язылган? - дип сорый.

Имам болай дип җавап бирә:

- Бер китапта да мондый киңәшне укыганым юк. Ләкин уйлый торгач, башыма шундый фикер килде. Шайтан синең төн буе намаз укуыңа риза булмаячак. Шуңа күрә югалган әйберен исенә төшерер дә намазын боздырыр дип уйладым. Шулай булып чыкты да. Ләкин хикмәт анда түгел. Әгәр син, янчыкны тапкач, төннең калган өлешен дә гыйбадәт белән үткәргән булсаң, ул вакытта нәфесеңне җиңгән шайтан коты булмас иден.

Әйе, уйлану, фикерләү кешенең зиһенен көчәйтә, катлаулы мәсьәләләре хәл итү юлларын табарга ярдәм итә.

Имам Әгъзам хәзрәтләре белән бәйле тагын бер гыйбрәтле вакыйга искә төште. Шулай бервакыт аның янына бер адәм килеп: "Кетәклегемнән тавыкларымны урлыйлар, кем икәнен белә алмыйм", - дип зарлана. Имамнан ярдәм сорый.

- Урланган малны табу минем вазифа түгел. Шулай да син җомга көнне мәчеткә кил әле, шунда уйлашырбыз, - ди Имам Әгъзам.

Җомга намазы алдыннан мәчеттә сөйләшеп утырганда, Имам Әгъзам кәтмәгәндә әйтеп куя:

- Карагыз әле, кайберәүләр мәчеткә киемнә тавык йоннары ябышкан килеш килә башлады. Аллаһ йортына мондый кыяфәттә килергә ярамый.

Бу сүзләрдән соң җәмәгать беравык тынсыз-хәрәкәтсез кала. Ә тавыгы урланган кешенең күршесе куллары белән баш киемен һәм кулбашларын капшый башлый.

Шуннан соң Имам Әгъзам болай ди:

- Күршесенең тавыгын урлаган адәм гаебен танып аннан гафу үтенсен, югыйсә бу турыда җәмәгатькә фаш итәм.

Теге карак җомга намазы укылып беткәч тә, күршесеннән гафу үтенә, аны бәхилләтә, урлашу гадәтен ташлый. Менә ничек: китапларда эздереп әйтелмәгән җавапларны бик нык уйланып, тирән фикер йөртеп тә табарга мөмкин. Китап уку ял да булсын, зиһенегезне дә баетсын.